Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение

«Средняя общеобразовательная школа № 23»

городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан

**Рабочая программа**

**по учебному предмету**

**«Башкирский язык как государственный»**

Уровень начальное общее образование

Классы 2-4

Срок реализации рабочей программы 2019- 2022 гг.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр**

**Шәхсән һөҙөмтәләр**

-уҡыусының мәктәпкә яҡшы ҡарашы кимәлендә эске позицияһы;

-социаль, уҡыу, танып-белеү һәм тышҡы мотивтарҙы үҙ эсенә алған уҡыу эшмәкәрлегенең киң мотивациялы нигеҙҙәре;

-яңы уҡыу материалына һәм уны эшләү сараларына ҡыҙыҡһыныу;

-уҡыу эшмәкәрлегендә уңыш сәбәптәрен аңлауға ориентация;

-үҙеңдең уҡыу эшмәкәрлегенә баһа бирә белеү;

-гражданлыҡ нигеҙҙәре, үҙеңде «Мин» ғаилә ағзаһы, Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәүсе, халыҡ һәм Башҡортостан Республикаһы вәкиле, Рәсәй гражданины итеп ҡабул итеү;

-төп әхлаҡи нормаларҙы белеү һәм буйһоноу;

-оят, ғәйеп кеүек этик хистәрҙе үҫтереү;

-сәләмәт тормошҡа ориентир;

-экологик мәҙәниәт нигеҙҙәре: тәбиғәт донъяһы ҡиммәттәрен ҡабул итеү;

-донъя һәм ватан мәҙәниәте нигеҙҙәре менән танышыу сиктәрендә матурлыҡ хистәре тәрбиәләү;

Башҡорт телен дәүләт теле буларак уҡытыу программаһын үҙләштереүҙең **метапредмет һөҙөмтәләре** :

**Уҡыу.Текст менән эш**

**Текст менән эш:мәғлүмәт эҙләү һәм уҡығанды аңлау.**

Башланғыс класс сығарылыш уҡыусыһы өйрәнә:

-текста факттар, мәғлүмәттәр табырға;

-текстың темаһын һәм төп фекерен билдәләргә;

-тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлергә, план төҙөргә;

-текстағы төп ваҡиғаларҙы айырырға һәм уларҙың эҙмә-эҙлелеген билдәләргә;

-текста һүрәтләнгән объекттарҙы бер-береһе менән сағыштырырға;

-билдәһеҙ рәүештә бирелгән мәғлүмәтте аңлау;

-һүҙ, схема, таблица, диаграмма формаһында бирелгән мәғлүмәтте аңлау;

-тексты унда бирелгән мәғлүмәт буйынса ғына түгел, ә жанры, структураһы, һүрәтләү саралары буйынса аңлау;

-төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу;

-һүҙлектәр менән эш итә белеү.

**Текст менән эш: мәғлүмәтте үҙгәртеү һәм интерпретациялау.**

Башланғыс класс сығарылыш уҡыусыһы өйрәнә:

-тексты ҡыҫҡа һәм тулы итеп, яҙма рәүештә һәм телдән һөйләргә;

-факттарҙы текстың дөйөм идеяһы менән тура килтерергә, текста күрһәтелмәгән ябай бәйләнештәр булдырырға;

-текстҡа таянып һығымта яһарға, аргументтар табырға;

-текстың төрлө өлөшөндәге мәғлүмәтте дөйөмләштерергә;

-текстҡа таянып ҡуйылған һорауға яуап бирерлек монологик һөйләмдәр төҙөргә.

**Текст менән эш: мәғлүмәтте баһалау.**

Башланғыс класс сығарылыш уҡыусыһы өйрәнә:
-уҡылған текст буйынса баһаһын һәм үҙ фекерен әйтергә;
-текстың йөкмәткеһен, структураһын һәм тел үҙенсәлектәрен баһаларға;
-уҡылған йәки тыңланған текст нигеҙендә фекер алышыу диалогында ҡатнашыу.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә;
- (курс йөкмәткеһе кимәлендә) өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштырыу һәләте.

Башҡорт телен башланғыс кластарҙа өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы түбәндәгеләрҙе белергә тейеш:

**1.белергә / аңларға :**

-алфавитты, хәрефтәрҙе, өндәрҙе;
-һуҙынҡы өндәрҙе (ә,ө,е), йы, йе, йо берләшмәләрен уҡыу ҡағиҙәләрен ;
-һөйләм төрҙәренең интонация үҙенсәлектәрен;
- балалар фольклоры әҫәрҙәрен яттан һөйләргә;

**2.белергә:**

**Тыңлап аңлауҙа:**

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен,ҙурбулмағантекстарҙыңтөпйөкмәткеһен тыңлап аңлауы;
-төрлө телмәр төрҙәренә ҡараған хәбәрҙәрҙе ишетеп аңлау;
-таныш лексик-грамматик материал нигеҙендә төҙөлгән ҙур булмаған мәғлүмәтте аңлау;

**Һөйләүҙә:**

- элементар этикет диалогтарында ҡатнашыу (танышыу, ҡотлау,сәләмләү); телефондан һөйләшеүҙе башлау, дауам итеү һәм тамамлау;
-бойороу характерында диалог алып барыу, ярҙам һорау һәм тәкдим итеү;
-ҡыҫҡаса үҙең һәм ғаиләү, дуҫың тураһында һөйләү, тышҡы ҡиәфәтен һәм характерын һүрәтләү;
-мәктәп тураһында һөйләү;
-предмет тураһында ҙур булмаған һүрәтләмәләр төҙөү;
-плнға, һүрәткә таянып уҡыған текстың йөкмәткеһен һөйләп биреү, уға үҙеңдең ҡарашыңды белдереү;
-ятлаған шиғыр һәм йырҙарҙы һөйләү;

**Уҡыуҙа:**

- өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

**Яҙма телмәрҙә:**

-башҡорт теленән текстар күсереп яҙыу һәм унда һүҙҙәр өҫтәп сығыу;
-һүҙ, һөйләм, текст төҙөү;
-хатҡа яуап яҙыу, һөйләмдәрҙе яҙып бөтөү;

-һүрәт, текст буйынса һорауҙарға яуап биреү;
-үрнәк буйынса таблица тултырыу;
-ябай анкета тултырыу;
-үрнәккә таянып ҡыҫҡа ҡотлау яҙыу;
-дуҫыңа ҡыҫҡа хат яҙыу;
-планға һәм асҡыс һүҙҙәргә таянып ҡыҫҡа хикәйәләр яҙыу;

**3.үҙләштергән белемдәрҙе һәм коммуникатив һәләттәрҙе практик эшмәкәрлектә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу өсөн:**

- башланғыс класс уҡыусылары белеме кимәлендә башҡорт телендә һөйләшкән кешеләр менән телдән аралашыу, бүтән милләт вәкилдәренә яҡшы ҡараш үҫтереү;

-башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ ҡулланғанда психологик барьерҙы еңеү;
-балалар фольклоры менән башҡорт телендә танышыу;
-башҡорт һәм урыҫ телдәренең ҡайһы бер үҙенсәлектәрен тәрәнерәк аңлау.

**Уҡыу йылы аҙағында 2- се класс уҡыусылары түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейеш:**

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):
уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;
иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
текстың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.
2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):
бәләкәй күләмле текстың йөкмәткеһен һөйләү,
һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү,
диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,
үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,
ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.
3. Уҡыу (чтение):
тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
уҡыған текстың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.
4. Яҙыу (письмо):
хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,
шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 2-3 һорауға яуап яҙыу,
бирелгән ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу,
ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы диктант, изложение, инша яҙыу (программала күрһәтелгән нормалар күләмендә).

**Уҡыу йылы аҙағында 3- сө класс уҡыусылары түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейеш:**

Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;

Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;

Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;

Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;

Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;

Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;

Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;

Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү

**Уҡыу йылы аҙағында 4- се класс уҡыусылары түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейеш:**

Балаларҙың һүҙлек запасын арттырыу, шул һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен әүҙемләштереү.

Грамматик материалды үҙләштереү, уны дөрөҫ файҙаланып, бәйләнешле һөйләү, яҙыу күнекмәләрен артабан үҫтереү.

Республиканың тәбиғәте, халҡы, улар араһында башҡорттар, уларҙың тормошо, тарихы, хеҙмәте, көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре,– йолалары. Башҡортостан Республикаһының дәүләт символдары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре тураһында белемдәрҙе киңәйтеү.– Программала бирелгән шиғырҙарҙы ятлау, башҡортса йырҙар өйрәнеү һәм башҡарыу. Башҡортса телмәр төҙөү.

**Уҡыу предметының йөкмәткеһе**
**2- се класс**

2 класта түбәндәге темалар үтеү ҡаралған : “Танышыу” , “Сәләмәләү”, “1-ҙән 10-ға тиклемге һандар ”, “Нисә һорауы” , “Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн-хәрефтәре”, “Тән өлөштәре” ,”Минең ғаиләм.Туғанлыҡ терминдары” , “Нимә эшләй ?һорауы. Мин нимә яратам?”, “Аҙыҡ-түлек”, “Минең мәктәбем”, “Минең класым”, “Мин мәктәпкә йыйынам”, “Мин уҡыусы”,”Минең уйынсыҡтарым”, “Мин уйнарға яратам”,”Мин уйнарға сығам”, “Минең кескәй дуҫтарым” ,”Мин ял итәм”.

**Уҡыу предметының йөкмәткеһе,**
**3- сө класс**

3-сө класта үтә торған темалар: ”Һаумы, мәктәп!” (Алфавитты ҡабатлау), ” Мин танышам”, “Мин белем алам” (Уҡыу әсбаптары), ”Мин һәм минең ғаиләм”, ”Мин һөнәр һайлайым”, “Мин тәбиғәтте яратам”, ”Минең яратҡан миҙгелем”, ”Минең гардеробым”, ”Минең тыуған көнөм”, ”Мин сәйәхәтсе”, ”Мәҡәлдәр менән танышыу”.

**Уҡыу предметының йөкмәткеһе**
**4- се класс**

4-се класта түбәндәге темалар ҡаралған : “Көн дә мәктәпкә барам”(Минең яратҡан дәресем. Мәктәптә беҙ нимә тураһында һөйләшәбеҙ. Мин нимә уҡырға яратам. Минең мәктәптәге дуҫтарым), ” Мин ғаиләмде яратам” ( Мин- тәрбиәле абала. Сифат. Минең өйҙәге бурыстарым. Минең бүлмәм), “Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем” (Мин йәшәгән өй. Алмаштар. Минең күршеләрем. Мин яратҡан урындар. Беҙҙең уйындар), ”Ауылда/ҡалала йәшәйем” (Минең тыуған ҡалам. Ауыл һәм ҡала тормошо), ”Йыл миҙгелдәре һәм һаүа торошо тураһында һөйләшәбеҙ” (Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә? Бөжәктәр һәм хайуандар.Рәүеш. Һауа торошо), ”Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ” ( Ҡыҙыҡлы хәлдәр. Ҡылым. Минең хыялым), ” Һатып алырға өйрәнәм” (Минең бюджет. Мин модалы кейем яратам. Бүләк һайлайым).

**Тематик планлаштырыу**

| № | Тема | Грамматик тема | Кластар, сәғәт һаны | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | 2 | 3 | 4 |
| 1. | Белем көнө. Родной Башҡортостан. Һаумы, мәктәп! | *Һин кем?* Һорауы. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, башҡорт һәм рус алфавиттарын сағыштырыу. | | 1 | 1 |
| 2. | Танышыу. Мин танышам. | *Һеҙ кем? Һинең исемең нисек? Һин ҡайҙа йәшәйһең? Һиңә нисә йәш? Һин ҡайҙан?* Һорауҙарын үҙләштереү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. | 2 | 2 | |
| 3. | Был - мин. Тән өлөштәре. | Башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәре. *Минең, һинең , уның* алмаштары. *Нимә булды?* һорауы | 2 | | |
| 4. | Мин һәм минең | *Кем? Нимә эшләй? Нимә* | 1 | 3 | 6 |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | ғаиләм. Мин ғаиләмде яратам | *эшләргә тейеш?* һорауҙарын үҙләштереү Башҡорт телендә баҫым. Сифат. | | | |
| 5. | Мин нимә яратам? | *Нимә менән?* һорауы | 1 | | |
| 6. | Минең мәктәбем. Мин белем алам. Көн дә мәктәпкә барам. Минең класым. Мин мәктәпкә йыйынам. Мин дәрестә. Мин дәрестән сыҡтым. | Ниндәй мәктәп*? Был нимә? Бармы? Нимәһеҙ? Ниндәй класс? Кемдеке? Нисек? Ҡайҙа? Нимә эшләйем?* Һорауҙарын үҙләштереү. Һөйләмдәр. Хәбәр һәм һорау һөйләмдәр. «Исем» һүҙ төркөмө. | 18 | 4 | 6 |
| 7. | Минең уйынсыҡтарым. Мин уйнарға яратам. Мин уйнарға сығам. | Нимә*? Нимә эшләйбеҙ? Ниндәй? Миңә нимә кәрәк? Ҡайһы ?* һорауҙары. | 7 | | |
| 8. | Минең бәләкәй дуҫтарым. Мин тәбиғәтте яратам. | *Был нимә? Ниндәй? Нимә эшләй? Нимә эшләйҙәр?* һорауҙары | 3 | | |
| 9. | Мин һөнәр һайлайым. | *Кем ҡайҙа эшләй?*һорауы. | | 3 | |
| 10 | Минең яратҡан миҙгелем. Миҙгелдәр, һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ. | *Нимә? Нимә эшләй?* һорауҙарына яуап биреү. | | 3 | |
| 11 | Минең гардеробым. Һатып алырға өйрәнәм. | *Ниндәй?* һорауына яуап биреү "Сифат", "Ҡылым". | | 2 | 6 |
| 12 | Минең тыуған көнөм. | *Ҡасан?* Һорауына яуап бирә белеү. Рәүеш тураһында белешмә. | | 2 | |
| 13. | Мин сәйәхәтсе. | *Нимә менән? Нисек?* Һорауҙары. Рәүеш тураһында белешмә. | | 3 | |
| 14. | Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем. | «Алмаш» һүҙ төркөмө менән танышыу (зат, күрһәтеү, билдәләү алмаштары) | | 2 | 3 |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 15. | Ауылда / ҡалала йәшәйем. | Һан (төп, рәт һандары). | | 3 | 6 |
| 16. | Йыл миҙгелдәре, һауа торошо, тәбиғәт тураһында һөйләшәбеҙ. | Рәүеш. Сифат. | | 1 | 4 |
| 17. | Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ. | Ҡылымдың күплек ялғауҙары. Рәүеш. | | | 2 |
| 18. | Мин ял итәм. Хайуандар һәм ҡоштар донъяһын өйрәнәм. | Исем. Ҡылымдарҙың хәҙерге һәм киләсәк заманы. | | 3 | |
| 19. | Ҡабатлау, дөйөмләштереү, телмәр үҫтереү. | Үтелгәнде ҡабатлау, дөйөмләштереү, телмәр үҫтереү | | | |
| 20. | Уҡыу өсөн өҫтәмә материал. Һүҙ күрке – мәҡәл. | Ҡабатлау, үткән материалды нығытыу. | | 2 | |
| | | | 34с. | 34с. | 34с. |

2-се класта 2 контроль эш, 3-сө класта 3 контроль эш,4 -се класта 3 контроль эш ҡаралған.